*Закир ЗИННӘТУЛЛИН*

# Стереотиптарға һәм концепцияларға аныҡлыҡ индереп

«Ватандаш» журналы редакцияһы хеҙмәткәрҙәренең Башҡорт дәүләт университеты тарих факультеты студенттары, уҡытыусылары менән уҙған йылдың аҙағында үткән осрашыуында һүҙ Башҡортостан тарихын өйрәнеү һәм уҡытыу практикаһындағы бөгөнгө хәл тураһында барҙы. Осрашыуҙы ойоштороусы профессор, факультет деканы Марат Мәхмүт улы Ҡолшәрипов әңгәмәгә: «Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш», — тип йүнәлеш биреп, теманы киң ҡуйһа ла, сығыш яһаусылар үҙҙәре бөгөнгө шарттарҙа иң мөһим тип иҫәпләгән концептуаль нигеҙҙәргә баҫым яһаны. Һәр халыҡтың тарихи үткәне — уның сәйәси, социаль, иҡтисади һәм мәҙәни үҫеше логикаһын аңлауға, киләсәген күҙаллауға асҡыс, ошо йәһәттән «һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш» тезисын бик ҙур дәрәжәлә «һәр халыҡ үҙ яҙмышын үҙе билдәләргә тейеш» тип тулыландырырға ла мөмкин. Быға тиклем башҡорт тарихы әүәлге совет дәүере стереотиптарына һәм концепцияларына таянып өйрәнелде, йәғни беҙҙә тарих фәне мәктәбе ойошоу өсөн шарттар булманы. Һуңғы тиҫтә йылда альтернатив ҡараштар барлыҡҡа килһә лә, улар күберәк псевдотарихи, йә самаһыҙ мифлаштырылған «фольксхистори» йүнәлешендә булды. Әммә беҙгә бөгөнгө көндә культурология, социология, иҡтисад, сәйәсәт өлкәләрендәге үҫеш проблемаларын күҙаллау өсөн ныҡлы нигеҙ кәрәк, һәм уны һәр яҡтан уйлап эшләнелгән фәнни концепциялар, методология тәшкил итә ала. Тарихи анализ нигеҙендә генә милли үҫешкә, уның ниндәй формалар аласағына, ниндәй маҡсаттар ҡуясағына, ошо маҡсаттарға ирешеү өсөн ниндәй юлдар һайлаясағына, союздаш сифатында ниндәй сәйәси көстәргә, социаль ҡатламдарға, этник төркөмдәргә өҫтөнлөк бирәсәгенә прогноз яһарға мөмкин.

Иҫкергән концепция, методология, тарих фәне өлкәһендә ниндәй генә ҡыйыу һығымталар, асыштар яһалмаһын, уларҙың ҡиммәтен төшөрә. Был айырыуса бөгөнгө шарттарға, талаптарға яуап бирмәүе менән күҙгә ташланып торған терминологияла сағылыш таба. Мәҫәлән, тарихи хеҙмәттәрҙә әлегә тиклем башҡорттарҙы «революцияға тиклем күсмә халыҡ» тип күрһәтеү киң таралған, әммә тарихсылар араһында был хатаны аңлатыусы юҡ. Беҙҙәге һымаҡ, йәйге осорҙа малды йәйләүгә ҡыуыу башҡа халыҡтарҙа ла, шул иҫәптән цивилизациялы Европала ла булған: мәҫәлән, Швейцарияла, Шотландияла халыҡ көтөүҙәрҙе яҙ менән тауҙарға ҡыуа. Барлыҡ дәреслектәрҙә, энциклопедияларҙа хужалыҡ итеүҙең был төрө, һүҙмә-һүҙ алғанда, «отгонно-пастбищное животноводство», «сезонное альпийское животноводство» тип күрһәтелә. Беҙҙә халыҡ тарихы кәмендә өс-дүрт быуатҡа барып еткән ауылдарҙа, ғүмер баҡый бер төбәктә йәшәй, барлыҡ топонимдар, боронғо эпик ҡомартҡылары-быҙ, башҡа креатив материалдар башҡорт ырыуҙарының (ҡайһы бер авторҙар ошо «ырыу» төшөнсәһе урынына нигеҙһеҙ рәүештә «ҡәбилә» терминын ҡуллана) бик борон замандарҙан алып Иҙел-Урал төбәгендә йәшәп, автохтон башҡорт милләтенә нәҡ ошо төбәктә нигеҙ һалыуын раҫлай. Ләкин бында ла концептуаль берҙәмлек юҡ. Фәндә төпләнгән фекергә ярашлы, башҡорт этносының тәүге тупланыу үҙәге Ағиҙелдең түбәнге ағымы, Кама буйында баш ала. Быны Р.Ғ.Кузеев һәм башҡа ғалимдар XX быуаттың 50-се йылдарында уҡ, этногенезға ҡағылышлы бай сығанаҡтарҙы, археология, этнография, археография, һуңғы йылдарҙа генетика һәм башҡа фәндәр материалдарына таянып, дәлилле иҫбатлауға өлгәште. Әммә халыҡ араһында популярлыҡ яулап өлгөргән «фольксхистори» авторҙары милләттең автохтон формалашыу үҙәген йә Ете ырыу берлеге территорияһына, хәҙерге Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш төбәгенә, йә иран сығышлы тип иҫәпләнгән бөрйән һәм башҡа ҡайһы бер боронғо ырыуҙар ерҙәренә генә бәйләй. Билдәле булыуынса, Ете ырыу берлеге XIV—XVI быуаттарҙа ғына йәшәп, нигеҙҙә ҡыпсаҡ сығышлы ырыуҙарҙы ғына берләштерә. Иран сығышлы ҡәбиләләрҙең таралыу ареалы тағы ла тарыраҡ. Ғәмәлдә иһә автохтон башҡорт халҡының формалашыуы күпкә иртәрәк һәм ҙурыраҡ территорияла башлана.

Ошо тәңгәлдә тағы ла бер проблеманы күрһәтеп үтеү урынлы булыр. «Фольксхистори» авторҙары һуңғы йылдарҙа айырым башҡорт ырыуҙарын, мәҫәлән, венгрҙарҙың, ирандарҙың, йәнәһе, борон Уралда йәшәгән ата-бабаларына бәйләү менән сикләнмәй, үҙ версияларын тоташ башҡорт милләтенә ҡарата ҡуллана. Ул авторҙар этногенез проблемалары менән шөғөлләнгән ғалимдар, археология, генетика кеүек фәндәр биргән яңы мәғлүмәттәр менән дә иҫәпләшмәй. Етди тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, башҡорт этносында төрки, иран, фин, уғыр (һуңғыларын финдар менән бутау осраҡтары ла күп, ғәмәлдә иһә фин ҡәбиләләре бик борон дәүерҙәрҙән алып Уралдан Балтик диңгеҙенә, Скандинавияға тиклем территорияла йәшәй, ә беҙҙәге уғыр элементына килгәндә, ғалимдар уларҙы Обь уғырҙарына бәйләй. Фин ҡәбиләләре хәҙерге Башҡортостан территорияһының төньяҡ-көнбайышын биләй, ә уғырҙар төньяҡ-

көнсығыштан үтеп, Ағиҙелдең урта ағымында туҡтала. Иран ҡәбиләләре иһә зороастризм, Туран дәүерендә генә килгән тип иҫәпләнә) элементтары төп нигеҙҙе тәшкил итә, этнос ошо элементтар ҡушылыуы һөҙөмтәһендә, автохтон этнос булараҡ, нәҡ бөгөн башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә формалашҡан. Ошо төп концепты танып, боронғо башҡорт тарихындағы концептуаль тарҡаулыҡтан арыныу, тарихыбыҙҙы төрлө яҡҡа тартҡылауҙы туҡтатыу мөһим бөгөн.

Бынан ике тиҫтә йыл элек демократлашыу процестары башланғас, халыҡтар үҙ тарихтарына иғтибарҙы көсәйтте. Республикалар ошо ваҡыт эсендә тарихты өйрәнеү һәм уҡытыу концепцияларын булдырҙы. Башҡортостанда был эш, мәҫәлән, күрше Татарстан менән сағыштырғанда, бик һүлпән барҙы. Ундай концепция ғилми көстәрҙе төп йүнәлештәргә туплап йүнәлтеү, тарҡаулыҡтан ҡурсалау, сәйәси, иҡтисади, мәҙәни өлкәләрҙәге аҙымдарҙы баһалау өсөн мөһим. Концепцияның булмауы бер сиктән икенсеһенә һуғылыуға, фәндең сәйәси, социаль, иҡтисади, мәҙәни өлкәләрҙәге процестарға тейешле йоғонто яһай алмауына килтерә. Был, әлбиттә, тарих фәне менән бер рәттән, социология, культурология тармаҡтарына ла ҡағыла.

Осрашыуҙа ҡатнашыусылар фекеренсә, нәҡ заманса концептуаль нигеҙҙәр булмауын күреп, күп һанлы фальсификаторҙар башҡорт тарих фәненә һөжүмен көсәйтте. Йыш ҡына ул фальсификаторҙар тарих фәненә бер ниндәй мөнәсәбәте булмаған фольксхистори менән сикләнгән популяр авторҙарҙың фекеренә һылтанып, профессиональ тарихсылар, күренекле ғалимдарҙың хеҙмәттәрен дә шик аҫтына ҡуйырға тырыша. Тимәк, ошо яҡтан ҡарағанда ла, беҙгә, һис бер ниндәй конъюнктураға ҡарамай, бөгөнгө тарих фәненең концептуаль нигеҙҙәрен нығытыуға тотоноу кәрәк.

Башҡорт дәүләт университетындағы осрашыу Өфөлә Мифтахетдин Аҡмулланың 175 йыллыҡ юбилейына арналған байрам сараһы башланған көндө булды. Айырым алып ҡарағанда, республикала байрам бик яҡшы ойошторолдо һәм үткәрелде. Әммә бында барлыҡ булған мөмкинлектәр файҙаланылманы. Аҡмулланы мәғрифәтсе, шағир сифатында ғына күрһәтеү, тарихи концепция йәһәтенән ҡарағанда, бик аҙ. Мифтахетдин Аҡмулла Иҙел-Урал төбәгендә XIX быуаттың икенсе яртыһында көс алған реформаторлыҡ хәрәкәте көрәшселәренең береһе. Исламдағы реформаны быуат башында уҡ Ғәбдүнасир Ҡурсауи башлай һәм ғәмәлдә Европалағы христиан реформаторы Мартин Лютер аҙымдарын ҡабатлай. Шиһабетдин Мәржәни был эште дауам иттерә — нәҡ уны Аҡмулла алдынғы мосолман донъяһының үҙәк фигураһы — «Тимер Ҡаҙығы» тип күрһәтә. Артабан был эште 1906—1917 йылдарҙа «Шура» журналын сығарыусы Ризаитдин Фәхретдин дауам итә. Классик мәғрифәтселек дәүере әһеле Аҡмулла — ошо бер бөтөн теҙмәнең, Иҙел-Урал төбәгендә барған дөйөм тарихи, мәҙәни процестың айырып алғыһыҙ бер элементы. Уны дөйөм тарихтан айырып күрһәтеү күп иң мөһим бәйләнештәрҙе өҙөүгә, тарих фәне, культурологияның концептуаль нигеҙҙәрен, логикаһын инҡар итеүгә этәрә. Совет дәүерендәге һымаҡ, был тарихи шәхестең дә башҡорт тарихындағы ролен өйрәнеү формаль төҫ

ала, әүәлге совет стереотиптарынан бик юғары күтәрелмәй. БР Президенты Указына ярашлы, йыл һайын Халыҡ-ара Аҡмулла көндәре үткәрә башлау был йүнәлештә лә дөрөҫ концептуаль нигеҙ табып, тарих фәне, мәғариф, мәҙәниәт үҫешенә яңы этәргес көс өҫтәргә тейеш.

Осрашыуҙа ҡатнашыусылар башҡорт тарихына бәйле башҡа ҡайһы бер стереотиптарға ла баһа бирҙе. Мәҫәлән, «революцияға тиклем башҡорттар күсмә тормошта йәшәгән», тигән һымаҡ, «элек башҡорттарҙың үҙ яҙмаһы булмаған», хатта «элек башҡорттар тирмәләрҙә йәшәгән» кеүек стереотиптар ҙа беҙҙе биҙәмәй. Һуңғыһы, моғайын, беҙҙә хәҙер йыйындарҙа, һабантуйҙарҙа ғына түгел, ә һәр байрамда тиерлек тирмәләр менән самаһыҙ мауығыу менән бәйлелер. Әммә, тарихсылар раҫлауынса, тирмәләр йәйләү осоронда Башҡортостандың көньяғында ғына ҡулланылған, ә ямғырҙар күп яуған төньяҡ, көнбайыш төбәктәрҙә йәйләү осоронда алдан төҙөлгән аласыҡтарҙа, туҡран, күрен һ.б. тип аталған урындарҙа туҡталғандар, яҡын-тирәлә малдарын көтөп, бесән әҙерләп, ағас киҫеп ятҡандар. Ҡарт-ҡоро, бала-саға йыш ҡына йәйләүгә сыҡмай, ауылда ҡалған. Йәнә, башҡорттарҙың күбеһе әүәлдән игенселек менән шөғөлләнгәнен дә оноторға ярамай — улары иген өлгөрөү менән ураҡҡа тотонған. Халыҡ элек етен, киндергә тиклем үҫтергән — уны ла йәйен урып, ебетеп, туҡмап, тарап, ағартып өлгөрөргә кәрәк. Бөгөн онотолған ит ҡаҡлау, ыҫлау, тоҙлап киптереп, килелә төйөү йәки ҡул тирмәнендә тарттырыу, тиренән олтан, ҡайыштар эшләү, сбруй тегеү, кейеҙ баҫыу, тимерселек, дегет, ыҫмала ҡайнатыу, сана, арба эшләү һәм башҡа бихисап шөғөлдәр ҙә күберәк йәйге осорға бәйле. Йәйен малды төнөн дә көтөп ашатҡандар. Мал көтөү күберәк үҫмерҙәр эше булған, ә ололар ҡыҫҡа йәйге осорҙа башҡа эштәрҙе эшләп өлгөрөргә ашыҡҡан. Беҙ башҡорт халҡының матди мәҙәниәтенә тейешле иғтибар бирмәйенсә, был йүнәлештә лә хаталы стереотип таралыуға булышлыҡ итәбеҙ, үҙебеҙгә зыян килтерәбеҙ.

Боронғо яҙмаға киләйек. Европа халыҡтарында руналарҙан алып бөгөнгө латин алфавитына тиклем яҙма тарихы ныҡлап өйрәтелә. Әммә, күп белгестәр раҫлауынса (мәҫәлән, С.Е.Малов. Памятники древнетюркской письменности. М.—Л. 1951), герман халыҡтарының руналары Орхон-Енисей, Саян руналарына тап килә, ләкин төркиҙәрҙеке күпкә боронғораҡ. Башҡортостанда руналар һуғылған объекттар күп (ағастар, таштар һ.б.), әммә улар тейешенсә өйрәнелмәй. Беҙҙә руналарҙы тамға тип кенә беләләр, хәҙер уларҙың мәғәнәһен тергеҙеп, алфавит элементы икәнен күрһәтеү, фундаменталь статус биреү мөһим. Руник алфавит элементтарын, беҙҙәгесә, ниндәйҙер предметтарға оҡшатып ҡына «һәнәк», «сүкеш», «уҡ», «ҡойошҡан», «кирге», «ырғаҡ», «ҡапҡа», «һуҡа» һәм башҡалар тип атап йөрөтөү, руналарҙың күп яҡлы мәғәнәһен аңлатмау уҡыусыны ҡәнәғәтләндерә алмай, тарих фәнен дә кәмһетә. Иң тәүҙә, бәлки, Башҡортостанда осраған руналарҙы, мәҙәни ҡомартҡы булараҡ, барлап, реестр төҙөү кәрәктер. Мәҫәлән, Швецияла ундай реестрға 3500 текст һәм айырым руналар ингән.

Ғәрәп алфавиты нигеҙендәге яҙма осоро ла айырым өйрәнеүҙе талап итә. Ул дәүерҙәге ҡомартҡыларҙы өйрәнеү өсөн ғәрәп, айырыуса фар-

сы телен аҙ булһа ла белеү кәрәк. Заманында ғәрәп теле — ислам дине теле, ә фарсы шиғриәт теле булғанын оноторға ярамай. Уҡыусы өсөн боронғо ҡомартҡыларҙың бөгөнгө телдә бирелгән варианттары түгел, ә оригинал текстары ҡыҙыҡлыраҡ (әлбиттә, улар тейешле аңлатма, глоссарий менән тәьмин ителергә тейеш).

Башҡорт тарихын популярлаштырыу өсөн төрлө энциклопедиялар, иллюстрациялы баҫмалар күпләп кәрәк. Мәҫәлән, сәхнә оҫталары милли кейем, биҙәнеү әйберҙәре буйынса С.Н.Шитованың китабын ҡулланыу менән генә сикләнә. Бөгөн был китап ҡына белгестәрҙе ҡәнәғәтләндерә алмай. Әйтәйек, унда башҡорттарҙың хәрби кейеме, ҡоралы буйынса мәғлүмәттәр юҡ, республиканың төрлө төбәктәре буйынса ла материал аҙ. Тамашасы сәхнәлә ыҫпай, матур милли костюмдар күрергә теләй, ә унда һаман совет осорондағы стереотиптар тәҡдим ителә: бына, йәнәһе, күрегеҙ, элек, революцияға тиклем, башҡорттар ниндәй меҫкен кейенгән, йолҡош кеүек йөрөгән. Был хәл йәштәрҙә үҙ халҡының үткәне менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләүгә һис булышлыҡ итмәй. Милли костюмға бәйле тағы ла бер күренеш. Беҙҙә йыш ҡына оло ҡунаҡтарға елән, бүрек бүләк иткәнде күрергә мөмкин. Ләкин, этнографтар раҫлауынса, башҡорттарҙа иң затлы, ҙур символик мәғәнәгә эйә бүләк тип ҡәмәр иҫәпләнгән. Ул яҡшы ҡайыштан, биҙәктәр баҫып, нағышлап эшләнгән. Ҡәмәргә бер яҡтан күн моҡсай, икенсе яҡтан ҡынлы бысаҡ тағылған. Бысаҡтың һабы ағас, һөйәк, ҡайын туҙы, олтандан, ҡыны металл, ағас йә олтандан эшләнгән. Бысаҡ ҡыны ҡәмәргә ике ҡайыш элгес менән эләктерелеп, финдарҙың пекоһы һымаҡ горизонталь аҫылынып торған. Ҡәмәрҙе бүләк иткәндә: «Тормошоң ошо ҡәмәр ҡуласаһы кеүек түңәрәк, моҡсай тулы ырыҫ булһын, бысағынан ҡара көс өркөп торһон», — тигәндәр. Башҡортто ерләгәндә, ҡәмәрҙе ысҡындырып, биленә өҫтән һалғандар — был тормош ҡуласаһының өҙөлөүен аңлатҡан. Ҡатын-ҡыҙға моҡсай тағылған, биҙәлгән тар ҡайыш-билбау бүләк иткәндәр. Башҡорт кейеме элек кеҫәһеҙ тегелгәс, моҡсайлы бил ҡайышы бик кәрәкле иҫәпләнгән.

Уйлап ҡараһаң, тарих бит былар барыһы ла, әммә халыҡ уға бөгөн дә бик мохтаж. Тарихһыҙ киләсәк тә юҡ, бөгөнгө көнөбөҙ ҙә тулы, камил түгел. Ошо яҡтан тарихсылар күп эштәр эшләп, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, телен, милли үҙаңын, ғорурлығын тергеҙеүгә ҙур өлөш индереүгә һәләтле.

Тарихсыларыбыҙ, ошо өлкәлә эшләүсе ғалимдарыбыҙ һуңғы йылдарҙа суверенитет яулау өсөн көрәш авангардында барып, оло эштәр башҡарҙы. Бөгөн дә улар республикабыҙҙың федератив дәүләттәге статусын яҡлау, хоҡуҡтарын һаҡлау йүнәлешендә ҙур әүҙемлек күрһәтә. Беҙҙең башҡорт тарихы шул хәтлем бай, үҙенсәлекле, героикалы, данлы һәм шулар аша мауыҡтырғыс — ул бер ниндәй арттырып күрһәтеүгә, биҙәүгә мохтаж түгел. Уны замана талаптарына ярашлы бирә белеү генә кәрәк бөгөн. Йәғни, фән теле менән әйткәндә, тарих фәнендә ҡулланылған стереотиптарға һәм концепцияларға аныҡлыҡ индереп.